● ИҠТИСАД

# Мультиквалификациялы белгестәр кәрәк

## Хеҙмәт баҙарында хәл тотороҡло

Рәшит КӘЛИМУЛЛИН

**Өфө моторҙар берекмәһендә хеҙмәт баҙары өсөн иң кәрәкле һөнәрҙәргә бушлай уҡытыу курстары асылған. Өйрәнеү осоро тамамланғас та, ошо программаларҙы үткән йәш белгестәргә эшкә урынлашырға ярҙам итәләр.**



Фото: Өфө моторҙар берекмәһенең матбуғат хеҙмәтенән.

Уҡытыу "Ростех" корпорацияһының "Берләшкән двигателдәр етештереү корпорацияһы – Өфө моторҙар берекмәһе (ОДК-УМПО)" базаһында ойошторолған. Төүге көндән үк өйрәнсектәр предприятиела эшкә урынлаштырыла һәм ай һайын 36 мең һум стипендия ала. Улар махсус эш кейеме, йылы туҡланыу менән тәьмин ителә, бынан тыш, мотор эшләүселәр өсөн ҡаралған башҡа ташламаларҙан да файҙалана алалар. Мәҫәлән, ятаҡтан урын бирәләр, Өфө, Иглин һәм Благовещен буйлап вахта автобусында йөрөтәләр, Рәсәй Ҡораллы Көстәренән запасҡа сыҡҡандарға 45 мең һум күләмендә матди ярҙам күрһәтәләр, башҡа льготалар ҡаралған.

Уҡытыу программалары бер нисә йүнәлештә ойошторолған. Мәҫәлән, 6–10 ай эсендә өйрәнсектәр бер һөнәрҙе үҙләштерә ала: токарь, фрезлаусы, шымартыусы, программа менән идара ителгән станоктар операторы, механик йыйыу слесары, станоктар һәм слесарҙар эше контролеры һәм башҡалар. Шулай уҡ уҡытыу үҙәгенең төп йүнәлеше – бер юлы бер нисә яңы һөнәргә өйрәтеү, йәғни мультиквалификация биреү. Бында ике йыл уҡығандан һуң һәр кем, 4-6 ҡатнаш һөнәргә эйә булып, хәҙерге заман ҡорамалдарында ышаныслы эшләү күнекмәләре ала.

"Ростех"тың талаптарға тулыһынса яуап биргән иркен етештереү-уҡытыу үҙәге 200-ҙән ашыу ҡорамал менән йыһазландырылған, улар араһында һанлы программа менән идара ителгәндәре лә бар. Бында 14 лаборатория (һанлы программалы станоктарға программа урынлаштырыу, гидравлика/пневматика, электроника/электротехника, автоматлаштырыу/мехатроника, аддитив технологиялар, деталдәрҙең сифатына контроль һәм башҡалар), токарь, фрезлау, шымартыу станоктары урынлашҡан майҙандар, слесарь участкаһы һәм башҡа эшкә өйрәтеү урындары бар.

Әлеге мәлдә үҙәктә 1400 кеше уҡый. Улар араһында мәктәптә IX класты тамамлағандар ҙа байтаҡ, был үсмерҙәр Өфө машиналар эшләү колледжында һәм Өфө авиация техникумында Моторҙар берекмәһе менән төҙөлгән маҡсатлы килешеүҙәр нигеҙендә төрлө эшсе һөнәрҙәрен үҙләштерә.

"Берләшкән двигателдәр етештереү корпорацияһы – Өфө моторҙар берекмәһе" – Рәсәйҙә авиация двигателдәре уйлап табыу һәм етештереү менән шөғөлләнгән иң ҙур предприятие. "Ростех" корпорацияһына ингән был коллективта 24 меңдән ашыу кеше эшләй.